АШҠАҘАР №81 (2012), 8 октябрь, 2019 йыл

30 ЙЫЛҒА – 30 ИЗГЕ ЭШ







# ШАУЛАП ҮҪЕП КИТЕР ӘЛЕ БЕҘ УЛТЫРТҠАН ТИРӘКТӘР!

## Стәрлетамаҡта "Ашҡаҙар" гәзите аллеяһы барлыҡҡа килде

**Үткән һанда хәбәр итеүебеҙсә, баҫмабыҙҙың 30 йыллыҡ юбилейын үҙенсәлекле итеп, хөрмәтле гәзит укыусылар, һеҙҙең менән бергәләп ҡаршы алырға ниәт ҡылдыҡ һәм ошо йәһәттән "30 йылға – 30 изге эш" проекты барлыҡҡа килде.**

Проект сиктәрендә тәүге изге эш – ағас ултыртыу ине һәм беҙ уны ла тарихи мәл итеп мәңгеләштерергә булдыҡ. Артем урамында "Сити Молл" сауҙа үҙәгенән алып 70-се йортҡа тиклем дауам иткән "Ашҡаҙар" гәзите аллеяһында ағас ултыртыу акцияһы ойошторолдо. Был сара шулай уҡ "Йәшел Башҡортостан" акцияһына, республикабыҙҙың 100 йыллыҡ тарихына ла арналды һәм ул "Гәзит укыусы көнө" тип билдәләнде. Рухи дуҫтарыбыҙ менән ошондай форматта осраштыҡ һәм, әйтергә кәрәк, дуҫтарыбыҙ күп икән беҙҙең. Акцияны иғлан итеп тә өлгөрмәнек, ҡатнашырға теләк белдереүселәр ишәйгәндән-ишәйә барҙы һәм йөҙгә яҡын кеше был көндө беҙҙең менән бергә булды! Ҡала советы депутаттары, ҡала башҡорттары ҡоролтайы, Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе, "Ағинәйҙәр" ойошмаһы, Стәрлетамаҡ физик культура, идара итеү һәм сервис колледжы, Ж. Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия, яҙыусылар һәм шағирҙар, балалар экология үҙәге... Хәйер, һәр кемде барлап сығырлыҡ та түгелдер. Рәхмәт һеҙгә, дуҫтар! Ул үҫентеләр шаулап үҫеп китһә, әлеге урында "Ашҡаҙар" гәзите аллеяһынан атларға насип булыр!

Әйткәндәй, был акцияны башҡарып сығыуҙа сикһеҙ ярҙамдары өсөн, әлбиттә, Стәрлетамаҡ ҡала хакимиәте, "Стәрлетамаҡ урман хужалығы" дәүләт автоном учреждениеһына ҙур рәхмәтебеҙҙе еткереп ҡалабыҙ.

Изге эште бергәләп башланыҡ, юбилейҙы бергәләп ҡаршы алайыҡ, дуҫтар!

**"Ашҡаҙар"ҙар.**
**Салауат ЙӘРМИЕВ һәм Эльдар ФӘТТӘХОВ фотолары.**